# КҮБӘЛӘКТӘР ҺАҠЛАҒАН МИРАҪ

*Хөрмәтле уҡыусылар! Һеҙҙең иғтибарға Учалы районы Миндәк касабаһынан Ғиззәтуллина Мәрхәбә Сәғит ҡыҙы яҙып ебәргән Сак-Сук бәйете вариантын һәм башка фольклор әҫәрҙәрен тәкдим итәбеҙ.*

*Мәрхәбә апай 50 йыл Миндәк руднигында эшләгән. Хәҙер ул хаклы ялда, хеҙмәт ветераны. Халык ижады әҫәрҙәрен инәһенән (Ҡаҙаккол ауылы кыҙы), өләсәһенән (Әбйәлил районы Моракай ауылынан) отоп алған. Мәрхәбә апай яҙыуынса, Сак-Сук бәйетенең был варианты кұбәләк ырыуы башкорттарында киң таралған булған. «Башкорт халык ижады» томдарында Сак-Сук бәйетенең был варианты, Мәрхәбә апай яҙып ебәргән легендалар, йолалар ҙа осрамай. Был әҫәрҙәр телселәр өсөн дә файҙалы булыр тип, диалект, һөйләш цҙенсәлектәре менән бирелә.*

**Саҡ һәм Суҡ бәйете**

Ҡояш яҡтыһы төштө ҡыянға
Ятырға ваҡыт, еткән уйынға.
Килен аппағым, балдарға көймә,
Бөтә асыуҙы яулыҡҡа төйнә.
Беҙҙең тирмәлә ҡарындыҡ ишек,
Саҡ менән Суҡтың бәйетен ишет.
Сәхрә йәйләүҙә тора өс таған,
Яйыҡ буйҡайын кем моңға һалған.
Сабый игеҙәк уйнай болонда,
Әсәй күңелле, йәйғор түрендә.
Хозур донъяла күбәләк оса,
Бер туғандарың көнсөлдәп боҫа.
Ялтыр тулҡында сайҡала өйрәк,
Аяҙ ғүмеркәй булмай шул оҙаҡ.
Инәй ҡотҡоһон апайҙан алдыҡ,
Уйҙамағанда етемгә ҡалдыҡ.
Атай белмәне, һунарҙа булды,
Ҡумрыҡ һыуҙарҙа әсәй юғалды.
Яйыҡ буйында һүнде бер таған,
Ожмах донъяның кем моңон алған.
Атай алдында инәй һыҡтанды,
Тик эстән генә беҙҙе ҡарғаны.
Тамаҡ хаҡтары һөнәр юлында,
Инде беҙ ҡалдыҡ инәй ҡулында.
Кеше тупһаһы үҙе бер ҡойма,
Кереп тә сыҡҡас, элэкмәҫ йүрмә.
Әсәй гүр булғас, беҙ булдыҡ артыҡ,
Ямауҙы күлдәк, баштанды астыҡ.
Тағы ла атай урманға китте,
Беҙҙең яҙмышҡа инәй сос етте.
Атайҙың уғын инәй тotторҙо,
Бер-беребеҙгә нәфрәт тыуҙырҙы.
Икәү ыҙғыштыҡ тимер уҡ өсөн,
Инәй ҡарғаны ерҙе юк өсөн.
Тимер уҡ төштө, тәнгә ҡаҙалды,
Йөҙ мең ярсыҡтар ергә таралды.
Инәй һөйөнә, бауын баш һала,
Беҙҙең күҙҙәрҙе ҡанлы йәш ала.



Булманы аҡыл ғибрәт алырға,
Бер-беребеҙҙе ғәфү итәргә.
Емдәр ташыйҙар ҡоштар баҫыуҙан,
Инәй ҡарғаны беҙҙе асыуҙан.
Беребеҙ Саҡ булдыҡ, беребеҙ Суҡ
булдыҡ,
Таң алдарында сығып юҡ булдыҡ.
Инәй ҡарғаны, беҙҙе күп итте,
Атайым ҡайтҡансы беҙҙе юҡ итте.
Ҡибла яғынан елдәр иҫәлер,
Беҙҙең ризыҡты инәй киҫәлер.
Алты йәштәрҙә уйнап йөрөнөк беҙ,
Ете йәштәрҙә Саҡ-Суҡ булдыҡ беҙ.
Йәшел арбаға егелгән турат,
Инәй ҡарғаны, яралды канат.
Кәртәнән осоҡ, ҡундыҡ ағасҡа,
Нимә килгәндер беҙҙең был башҡа.
Ағасҡа ҡунғас, яралды ҡанат,
Инәй, инәйем, ҡалдың бит ҡарап.
Уң яҡта канат, һул яҡта канат,

Инәм ҡарғаны, итте бит харап.
Ҡомас ҡулдәкте бер ҙә кеймәнек,
Осоп киткәндә һау бул тимәнек.
Ярҙар ситендә томбойоҡ күрҙек,
Әсәй тыйһа ла сәскәһен өҙҙөк.
Ҡыуанма, инәй, тиҙ тип ҡотолдом,
Тәңре ҡурсауҙан һин бит отолдоң.
Албаҫты ҡыҙың әсәйҙе алдап,
Беҙҙең күлдәкте китте бит таштап.
Әсәй белмәне уймаҡ уйынды,
Оло ярһыуҙан һыуға ташланды.
Әсәй уҡталды, йөрәк ҡойолдо,
Хәле етмәгәс, күҙҙәр йомолдо.
Томбойоҡ матур, күңелдәре тар,
Йәшенеп ҡалдыҡ, ғәйеп беҙҙә бар.
Аҡыл булманы уяу булырға,
Ҡара ниәттең йөйөн ярырға.
Имеҙгән һөтөң, әсәй, беләһең,
Ҡиәмәт көндә бәхил булаһың.
Ғәзиз әсәйем, бер һүҙ әйтәйек,
Бәхил булдырһаң, өйгә ҡайтайыҡ.
Тәңренән гәзел әсәй ныҡ һорай,
Беҙҙең яҙмышты яҡтыға юрай.
Таш Урал алда, Сал Урал артта,
Оҙон ғынаһы ҡуңырлап тарта.
Ниңә ҡарғаның, тип әсәй илайҙыр,
Был һорауҙары барып етмәйҙер.
Ниндәй үс алып һин ҡарап торҙоң,
Ике баламды ҡарғап осорҙоң.
Күңелең булмаҫ Хоҙай ҡулында,
Сабыйҙар хаҡы әжәл туйында.
Ғазап тормоштан сәсең агарыр,
Бөтә ҡарғышың ауыҙыңдан һарҡыр.
Яуыз йәнкәйең төшөр тамуҡҡа,
Ике баламды ҡарғаның юҡҡа.
Әй һин, атаһы, ваҡыт тапманың,
Көндәш эйәнең ау(ы)ҙын япманың.
Әсәй киткәне, яман һыуҙы ер,
Уның әйткәнен балдар еткерер.
Суҡ муйылҡайҙың бөг(ө)лә баштары,
Ғәзиз әсәйҙең түг(е)лә йәштәре.
Улт(ы)рып уйнаныҡ, саҡ-соҡ иланыҡ,
Инәй ҡарғагас, оҙаҡ торманыҡ.
Урман эсендә ҡоштар һайраша,
Ҡоштар янында Саҡ-Суҡ илаша.
Ямғыр яуалыр тирмә башына,
Илап киләбеҙ инәй ҡаршына.
Тураңдан уҙҙыҡ, инәй, һиҙҙеңме?
Яныңдан уҙҙыҡ, атай, күрҙеңме?
Ишек алдында ҡоштар һайрайҙыр,
Балдар ҡайҙа, тип атай һорайҙыр.
Инәй ҡарғаны, атай, күрмәнең,
Тураңдан уҙҙыҡ, атай, белмәнең.
Ҡара эле, атай, болот аҡмышы,
Саҡ-Суҡ булдыҡ беҙ, инәй ҡарғышы.
Инәй ҡарғаны рамазан айҙа,
Саҡ-Суҡ булдыҡ беҙ ҡәҙер кисендә.
Ҡондоҙ йәнлеге һис тыныс ятмай,
Инәй ҡарғышы һис кире ҡайтмай.
Инәйҙең һөтө беҙгә булманы,
Ҡәһәр ҡарғышы юлын борманы.
Яйыҡ буйҡайы — һары ҡамышы,
Төнөн ишет(е)лә Саҡ-Суҡ тауышы.
Ҡояш сыҡҡанда нур төшә күҙгә,
Ҡиәмәт көнһөҙ ҡауышыу юҡ беҙгә.
Ҡара төнкәйҙе елдәр тарата,
Ҡауышам тигәндә ҡапыл таң ата.
Беребеҙ уң яҡта, беребеҙ һул яҡта,
Бергә булаһы килә шул саҡта.
Бер төн тулғансы ҡайтабыҙ тинек,
Ҡояш тиҙ сыҡҡас, өмөттө өҙҙөк.
Киттек урманға, ҡуйы ҡарағас,
Инәй, һыҡтама, үҙең ҡарғағас.
Инәй күрә алмай, урман яндырҙы,
Әсәй түҙмәне, ямғыр яуҙырҙы.
Урал тауҙарҙа атай йөрөнө,
Оҙаҡ ҡайтмағас, бүре олоно.
Атай, һалынма, ҡаза Тәңреһе,
Ике балаңдаң ҡалманы бер(е)һе.
Атай, үртәнмә, Хоҙай йомошо,
Инәйҙең төштө беҙгә ҡарғышы.
Тирбәлә ай нуры Яйыҡ һыуында,
Саҡ-Суҡ булыуҙар кемдең уйында.
Ике сабыйҙы йәлдәне бүре,
Мәңге юйылмаҫ халыҡ хәтере.
Хоҙай ишетте бүре тауышын,
Кирегә һалды тәҡдир яҙмышын.
Зөһрә өләсәй балдағын йышты,
Инәйҙең ҡыҙы түлһеҙ ҡурышты.
Оло быуын гонаһы балаға күскәс,
Үкенәлер инәй иҫенә төшкәс.
Донъя рәхәтен үлсәп, тоталмай
нуҡта,
Үҙ көнсөллөктәренән күптәр
дөмөктө.
Асыуҙың һүҙе тәүфиҡ терелтмәй,
Хаҡһыҙ ҡарғыштар бәхет
килтермәй.
Әй ҡолондарым, ятығыҙ имен,
Дәүен баҙарын өҙмәгеҙ ебен.

### ЕТЕ ҠЫҘ

Күк һауала һары ҡояш,
Башҡорт тота йолаһын.
Ете һылыу рөхсәт ҡыймай
Бәйгеләрҙә ҡыуып алаһын.

Ете ырыу бер халыҡ
Мәңге ҡурсалаған Уралын.
Биргән ашын һис йәлдәмәй
Хөрмәт иткән ҡунағын.

Яҡшы ҡолаҡ, яман телдәр,
Иблис белмәҫ самаһын.
Ҡомһоҙ антҡа бөркөт ыҡмай
Үкенерлек булып ҡалмаһын.

Яттар уйы, яуыз ниәт
Булмай үлсәп дуҫлыҡты.
Һаман батша ергә туймай,
Яуға бирҙе бой(о)роҡто.

Нәҙек тояҡ, түр ялҡай
Тоғро булһын юлдашым.
Ете ҡыҙыбыҙ имен теләй,
Оҙатып ҡалды яҙмышым.

Егет уғы, батыр даны
Алда уҡтала шаңдауы.
Артта түрә ҡәрйә талай,
Ыңғрап ҡала Уралтауы.

Саян хаким, хасид монар,
Ҡанға батты тәндәре.
Ете һылыу намыҫтарын һаҡтай,
Күккә ашты йәндәре.

Миңә юлдар, етеһенә ҡәбер,
Ярһып ҡайттым илгә.
Таған ҡороп, ҡыҙҙар көтмәй,
Көлкәйҙәре осҡан елгә.

Ҡара урмандың Урал ташы
Борон йәшәгән төйәгем.
Ете ҡыҙҙың ҡонон алмай
Тәргә инмәҫ һөйәгем.

Асыҡ тирмә, тишек ҡаҙан,
Балдар килмәҫ ҡашыма.
Үткер балта билдән төшмәй,
Аҡыл керҙе башыма.

Ҡаршы алым, йомаҡ сере
Өмөт бағлай һәр кеше.
Суҡ ботағын уйып сыҡмай,
Ҡорттап китмәҫ емеше.

Иҙел һыуы, текә ярҡай
Быуынға күскән аманат.
Ете ҡыҙҙар төндә балҡый,
Онотор лоҡ түгел хыянат!

**Ете ҡыҙ һыҡтауы**

Әй йәрем, ҡайғы килде —
ҡара болот,
Зинданға беҙҙе яптылар.
Атай-инәй риза булмағас,
Башҡайҙарын өҙә саптылар.

Яһилдарға эйәк ҡағып,
Ҡой-һыуыға юлды астыҡ.
Донъя рәхәт, тик әжәл һорап,
Үп-яр ситенә баҫтыҡ.

Ҡәрйә осо, ҡыҙҙар тауы,
Ҡоштар тынды һайрамай.
Беҙҙең яҙмышты иҫкә алып,
Үс алығыҙ инде, онотмай.

**Ете ҡыҙ (бейеү йыры)**

Беҙ, беҙ инек, ете ҡыҙ инек,
Түргә яҡын килмәнек,
Нисек кенә димләһә лә,
Ризыҡ ауыҙ итмәнек.

Беҙ, беҙ инек, ете ҡыҙ инек,
Туй күлдәген кеймәнек,
Нисек тауыш өҙөлһә лә,
Бейеү аша йырланыҡ.

Беҙ, беҙ инек, ете ҡыҙ инек,
Күл буйында йыйылдыҡ,
Нисек йәшәү килһә лә,
Һыу аҫтында ҡыйылдыҡ.

Беҙ, беҙ инек, беҙ ете ҡыҙ инек,
Һөйгәндәрҙе онотманыҡ,
Нисек ауыр булһа ла,
Тоғролоҡтан уҙманыҡ!

## ИШ-ҠУШ ЙОЛАҺЫ

Әүәле заманда бер ҡыҙ күбәләк ырыуынан Ҡатай яғына кейәүгә сыҡҡан. Тик бер аҙ ваҡыт үткәс, килен мантымай баштаған. Ашы һеңмәй икән, ҡоҫа ла ҡоҫа. Аҙаҡ ҡан менән ҡоҫа баштаған. Төрҙөсә имләп ҡарайҙар икән, тик һис килешмәгән. Беҙҙең яҡтан, Тиләүҙән, бер әбей барған булған шул ауылға ҡунаҡҡа. Был хәлде ишетеп былай тигән: «Иш-ҡуш кәрәк аға, уны һыу эйәһе ебәрмәй тота». Ҡыҙға тыуған яғынан һыу алып килеп эсергәндәр. Һәйбәт булған, әммә ауырыу бөтмәгән ти. Кейәү менән әбей киткәндәр Ҡыҙыл йылғаһы башына. Шунан әбей ике Ҡыҙыл һыуын бергә ҡушып, ун ике ижау һыу алған (Оло һәм Бәләкәй Ҡыҙыл йылғалары). Ҡайтҡас Ағиҙел һыуын ҡушҡан болғатып. Аҙаҡ ҡалаҡ алып киленгә

эсергәндәр был һыуҙы ошолай һамаҡтап: «Ҡыҙыл һыуҙары ҡуш-ҡуш, Иҙел һыуға иш-иш, тәнгә булһын хуш-хуш, ҡорт-ташты тиш-тиш!» Һыуҙы аяҡ-ҡулды, ҡолаҡты, билде, муйынды, башты уратып биргәндәр. Уратҡанда килен күҙе йомоҡ, бите ябыҡ була. Элек тә шулай итеп батырҙарҙы йүнәлткәндәр тейҙәр. Әйткәндәй, Ҡыҙыл йылғаларының элек атамаһы, имеш, Ҡая иҙел булған, сөнки улар Ҡырҡты тауын, ҡаяларын гел иҙеп торғандар. Тауҙың исеме Ҡырҡты — ҡырҡылған һүҙенән, ҡырҡ һанын аңлатмай.

### Ҡыҙ-ҡырҡын уҙыуы йолаһы

Элек шундай йола булған. Ҡыҙ баланың йәше күремгә етһә, ҡырҡ көн аны кешегә күрһәтмәгәндәр, һауаға ҡаратмағандар. Йылға-һыу аша ла атланып үтмәҫкә тейеш икән ул. Ҡыҙҙың быуындарын, муйынын бәйҙәп ҡуйғандар, сәсен ныҡ үргәндәр, көн дә ҡойондорғандар. Сәсен тарарға, тырнағын ҡырҡырға ярамаған. Уға эш тә ҡушмағандар. Ҡыҙҙың эше булған бер: йәрәшелгән кейәүгә төрҙө әйбер йөндән бәйҙәгән. Ҡырҡ көн үткәс, ҡатындар байрам ойоштorған, һыу буйында ҡойондороп, ҡулына матур-матур беләҙек кейҙергәндәр, элекке бауҙар урынына.

### Атай булыу йолаһы

Ҡатыны бала тапҡанда, ир аҙна буйы тәртипте булырға тейеш. Ул көндө ир һәнәк, бысаҡ, ҡайсы һәм башҡа осто әйберҙәрҙе тотмаҫҡа тейеш. Тыуасаҡ балаһына зыян булмаһын өсөн. Бала тыуғас та тыныс булһын тип, көндөҙ йоҡтарға ла була. Әгәр шул ваҡытта төш күрһә, ҡарттар аны юрайҙар. Баланың яҙмышын, һауа торошон юрайҙар. Ваҡиғаларҙы ла күҙәтәләр. Шунан бала тыуһа, атаһы ҡулына алып һәмгелсәккә һала. Малай булһа — бысаҡ, ҡыҙ булһа — сепрәк-бау һала эргәһенә. Ҡайһы берҙә бысаҡ урынына малайға — уҡ, ҡыҙға күмер һалалар.

### Ҡаран һәм Һаран

Һыу инәһенең, мәскәйҙең ике балаһы бар: Ҡаран һәм Һаран. Улар кешегә тик яманлыҡ эштәйҙәр: ярҙы йыуалар, һыуҙы ҡумырыҡтайҙар, кәмәләрҙе тишәләр, күперҙе осоралар. Ҡаран-Һаран игеҙәк, береһе — уңға, икенсеһе һыуҙың һул ярына хужа, тик бергә һөжүм итәләр. Үҙҙәре күренмәй: берәүһе һыу бирмәй ҡаңғырта, икенсеһе артыҡ таштыра. Йәшәгән урындары — күлдән сыҡҡан ҡылыу һыуҙары. Ҡарттар әйтә торғайны: Өскүл, Оҙонкүл күлдәрендә, Биҙгенде буйында бар алар тип. Һыу һарғайып китһә — Һаран хужа, ҡарайып китһә — Ҡаран хужа ваҡыты тиҙәр. Аталары аларҙың — Убыр, инәләре — Һыу инәһе. Убыр тик бер ерһыуҙа ятһа, мәскәй ҡойон аша күсеп йөрөй. Төп йорто — Мауыҙҙы күле. Ҡаран һәм Һаран ир бала. Шуға тик йәш ҡыҙҙарҙы урҙай, ҡытыҡтай. Аларҙың ҡурҡҡаны — ҡороҡ арҡаны, ишелгән сыбыртҡы, ҡыйыш-билбау. Элек батырҙар шуларҙы һалып, Ҡаран-Һаранды тотоп, яһаҡ түләткән. Әйткәндәй, Миндәк ҡасабаһы һәм Килмәк араһында ятҡан күл — Миһеле, йәғни Маҙалы. Батҡыл, кәрәкә булғанға шундай атама биргәндәр. Ул күл йыл һайын кешене ҡорбан итә. Шул булмаһын өсөн элек әбейҙәр ялтырауыҡ әйбер күлгә таштаған. «Мә, һиңә бүләк, төбөң булһын түйләк!» тигәндәр. Әле Ҡаранйылға Миһеле күленә төшә, Һаран ҡылыу күлдән сығып Табылғашты йылғаһына ҡоя.

### Айыу олатай

Боронғо замандарҙа, имеш, ерҙә тик кеше генә йәшәгән. Аҙаҡ һыуыҡ булғас, ҡыш килгәс, кешеләр үҙҙәренә кейем йүнәткән. Шунан хайуан

килеп сыҡҡан ти. Әле лә имеш хайуандар өңдәрендә тиреһен сисәләр һәм кеше булып китәләр икән. Ул хайуандар кешегә лә һәм ысын януарға түрә тейҙәр. Алар ҡурсалайҙар төрҙө бәлә-ҡазаларҙан. Ҡайһы бер ырыу-аймаҡ атамалары шунан килә. Әгәр кеше айыу тигән аймаҡтан икән, ул айыуға һунар итергә, аның итен ашарға тейеш түгел. Элек байрамдар ҡорғандар. Байрамдан алда айыу олатайҙан рөхсәт һорап, ошо һамаҡты әйткәндәр: «Айыу олатай, балдарым ас интегә, бер ғәйебе булмаған, йола тотмаған, зат-ырыуҙы аларға тәмдәргә рөхсәт ит». Шунан ирҙәр урманға киткән айыуға һунарға. Ул айыуҙы алып ҡайтып, йортҡа индереп ҡуйғандар. Һуйғас, башын айырым алып, өҫтөнә ҡош йөнө һипкәндәр. Баш һөйәген йыуып бер бағанаға элеп ҡуйғандар. Элекке баш һөйәген (былтырғы) һәм башҡа һөйәктәрҙе урман, тауға илткәндәр. Бер яҡшы кеше айыу тиреһен кейеп, өс көн бейеп йөрөгән, ошолай йырҙап: «Айыу олатай, ҡот бир, ҡасһын беҙҙән сир-ир!» Ҡатындар, ҡыҙҙар ҡысҡырған: «Айыу олатай, ҡот бир, һинең һымаҡ булһын балам ир-ир!» Әле был йола онотолған, Ҡарағужа ауылында айыу аймағы тороп ҡалған.

**Ҡарға хикмәте**

Ҡаҙаҡкол һәм башҡа ауылдарҙа ҡарға аймағы бар. Кеше уларҙы ҡара (черный) тигән һүҙ менән бәйҙәй. Әммә был исем-атама ҡош исеменән сыҡҡан. Ҡарға ҡошона бәйҙе алар. Ата-бабалары, имеш, ҡарға булған аларҙың. Ҡарға ата Умай ҡоштоң игеҙәге булған тейҙәр. Ул иңбашта ултыра, умрау (ключица) һөйәгендә кешенең. Умай ҡош һәм Ҡарға ҡош Тәңре ярҙамсылары икән. Улар һәйбәт һәм яман эштәрҙе ҡарап торалар икән. Әгәр Умай ҡош осоп китһә, кешенең ҡомары ҡаса, иңбаштары һәлберәп төшә һәм ул кеше тиҙҙән үлә тиҙәр. Ҡарғаны яҡшы ҡош тип әйтәләр. Бәләкәй сағында ул ап-аҡ булған. Шул кеше яуызлығы арҡаһында ҡап-ҡара булып киткән.

Ҡарға кешене кеше иткән тейҙәр: телгә өйрәткән, ут табып биргән ҡояштан. Шуңа ла, имеш, ҡояш нурҙарында көйөп, ҡап-ҡара булған. Ул яуыз ниәттәрҙән һаҡсы ҡош. Аның ҡанатҡайҙары өйҙө, кешене, малды ҡурсалап тора. Психик, баш ауырыуҙарынан, күҙ тейеүҙән, ҡарғыштан ышыҡлай. Ул тәнде ҡарға ҡанаты менән һыйпау, күренмәгән ергә-кейемгә тегеп ҡуйыу, һүрәтен әйбергә төшөрөү, итен ашап та ауырыу-сархауҙан ҡотолғандар. Ҡарға хайуан-ҡортҡа йә дуҫ, йә дошман була. Ҡорт бәгзе бүре кеүек януар росомаха менән ашағанда дошман булалар икән. Элек Ут эйәһе һәм Һыу эйәһе тик һуғышып йәшәгән. Ҡарға аларҙы ярыштырып ҡараған, әммә сыҡмаған был эше. Йәне көйөп, ҡарға аларҙың өҫтәренә сысҡан ти, шунан беҙҙең ер-тупраҡ килеп-сыҡҡан. Ҡарға ҡырҡылдаһа, көн йонсоу була. Әгәр кешене кемдер рәнйеткән булһа, ул ҡарға ҡарҡылдағанда алғыш әйтһә, теге әҙәм-бәндәләргә ҡарғыш төшә. Ҡарға берәүгә күренһә, аш бирәләр, теләк әйтеп. Баҫыуҙа күберәк иген уңһын тип, ҡарғалар күбәйеп китһә, ҡысҡырып әйтәләр: «Ана килә бабай ел, һин ҡарға, самаңды бел». Әле әйтәләр: «Ҡарға күҙен ҡарға соҡомай» тип («түрә түрәгә теймәй» мәғәнәһе). Әгәр быны әйткәндә ҡарға ишетһә, йәки шул ваҡытта ҡарҡылдаһа, был түрәнең тормошо ормошҡа әйҙәнә. Үлем ғазабында ҡарға тегенең күҙен соҡой. Шуға гонаһтарҙы ҡаптар өсөн, күҙҙең сырағы ялтырап ятмаһын өсөн, күҙгә биш тин аҡса һалыу йолалары бар. Әйткәндәй, Ғәлиәхмәр ауылында ҡарға аймағы бар, тик уларҙың ата-бабаһы ҡарға түгел тип иҫәпләйҙәр. Ҡара башты ҡараҡ торна булған тиҙәр. Торна оялаған яланда берәү шул аймаҡтан бесән сапҡан. Теге ҡоштар: «Ҡәһәр һуҡһын был кешене», тигәндәр, шул ерҙә теге үлгән дә ҡуйған. Ҡара табындар шул ҡара торна затынан, табын иһә тиләү ырыуының бер тармағы. Бәлки, «Сыңрау торна» йырының да быға ҡағылышы барҙыр.